




## Ата-әсәйҙәр өсөн консультация

## Балалар баҡсаһына сабыйығыҙ тиҙ өйрәнһен тиһәгеҙ...

**Балаға баҡсаға йөрөргә өйрәнеп китергә нисек ярҙам итергә?**

**Мотлаҡ баланың:**

- **аралашыу даирәһен киңәйтергә,**
- **таныш булмағандарҙан ҡурҡыуын еңергә,**
- **ят кешеләрҙең ҡылығына иғтибар итергә,**
- **уйынсыҡ менән уйнарға,**
- **“турғай һымаҡ осайыҡ”, “ҡуян һымаҡ һикерәйек” тигән кеүек сағыштырырға,**
- **башҡа балаларға мөрәжәғәт итергә,**
- **уйынсыҡ менән бүлешергә өйрәтеү зарур.**

**“Балалар баҡсаһына бирергә тура килә инде”, - тип йәлләргә кәрәкмәй.**

**Ваҡытында үҙ аллы эшләргә, үҙен хеҙмәтләндерергә өйрәтеү мөһим. Балаға талап бер төрлө һәм эҙмә-эҙлекле булырға тейеш. Яңы шарттарға ыңғай тәьҫорат уятыу өсөн атай-әсәйгә, иң тәүҙә, баланы баҡсала оҙаҡҡа ҡалдырмаҫҡа, балалар байрамын ойошторoccуҙа ҡатнашырға, кис көнө тик ҡыуанысллы хәбәр менән уртаҡлашырға, тыныс һәм изгелекле мөхит тыуҙырырға кәрәк.**

